# Башҡортостандың халыҡ шағиры Ҡәҙим Аралбаев



**Ҡәҙим Аралбай** — Башҡортостандың халыҡ шағиры (2011), Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты (1996), шулай уҡ С. Чекмарёв (1984), Р. Ғарипов (1998), З. Биишева (2000), Ф. Кәрим (Бишбүләк районы, 2009) һәм Назар Нәжми (2014) исемендәге әҙәби премиялар лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Хәйбулла районының почетлы гражданины.

# Башҡортостандың халыҡ шағиры исемен тапшырыу (2011й.)





**Аралбаев Ҡәҙим Әбделғәлим улы** 1941 йылдың 1 сентябрендә Башҡорт АССР-ының Хәйбулла районы 1 сентябрендә Башҡорт АССР-ының Хәйбулла районы Таңатар ауылында тыуа. Урта мәктәпте тамамлағас, колхозда шофер булып эшләй, Совет Армияһы сафтарындағы хәрби хеҙмәттә лә шоферҙар взводы командиры була.

# Әрме хеҙмәте





Башҡорт дәүләт университетын тамамлағас, Бөрйән, Баймаҡ райондары мәктәптәрендә урта мәктәп директоры урынбаҫары булып эшләй. 1971—1973 йылдарҙа СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы аспирантураһында уҡый. Ләкин уны шиғриәт донъяһы нығыраҡ тарта, һәм ул шул уҡ йылда «Ағиҙел» журналына эшкә күсә.

1977-1981 йылдарҙа Башҡортостан яҙыусылар союзы1977-1981 йылдарҙа Башҡортостан яҙыусылар союзы идараһында яуаплы секретарь, 1981—1988 йылдарҙа КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетында мәҙәниәт бүлеге инструкторы, 1988—1983 йылдарҙа Башҡортостан яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары, 1993—2001 йылдарҙа «Китап» нәшриәтендә баш редактор һәм директор була.

- Бер ни тиклем ваҡыт Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары вазифаһын башҡара. Шундай яуаплы урындарҙа эшләү менән бергә ул башҡорт шиғриәтенең йөҙөн һәм ҡеүәтен билдәләүсе шағир булып ижад итә.

Ҡәҙим Аралбайҙың «Утлы кисеүҙәр» (1975), «Батыр яраһы» (1980), «Аҡ тирмә» (1982), «Һөйөүем йондоҙо» (1986), «Әле һуң түгел» (1989), «Мәслихәт» (1991), «Рух яҙыуы» (1995), «Таналыҡ тауышы» (2001) һәм башҡа китаптары төрлө телдәрҙә нәшер ителде.

# Шағирҙың төрлө йылдарҙа сыккан китаптары



# Даланың даланлы улы





# Хәтерҙәрҙә мәңге ҡалыр осрашыуҙар…



# Осрашыуҙар







# «Йомабай ҡурайы» шиғырынан өҙөк

Урал ғына тауҙың көн битендә
Үҫә генә булыр бер ҡурай.
Шул ҡурайҙы ҡырҡып уйнаниһәң,
Моңо Урал тауын бер урай...
Ҡурай тарта егет. Эй һыҙҙыра!..
Ҡайҙан ғына сыға был тауыш?!
Ярһыу хисе, моңһоу наҙы менән
Йөрәктәрҙе һыға был һағыш...



# Й.Иҫәнбаевтың ейәне менән. Өфө ауылында.



# “Хәйбулла” шиғырынан өҙөк

Ул далалар иркенлеге,
ҡырҙарының киңлеге!..
Еренең киңлеге менән
бер дәүләткә тиңлеге.
Ул күк әрем, юшан еҫе,
бал ташыған күстәре...
Убаларҙа аҡ ҡылғандар —
сал тарихтың сәстәре.
Ул Һаҡмары — көмөш йүгән
урманда айыуҙарға,
Таналығы — ебәк ҡороҡ
баш бирмәҫ айғырҙарға.

# Хәйбулла далалары





# Әҙиптең яңы сыҡҡан китабы

